**Муниципальное дошкольное образовательное бюджетное учреждение Детский сад «Умырзая» д. Валитово муниципального района Хайбуллинский район Республики Башкортостан**

**Башҡортостан Республикаһы Хәйбулла районы муниципаль район Вәлит ауылы “Умырзая” балалар баҡсаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы**

# ПОРТФОЛИО



## Статистические данные:

-Охват обучением на башкирском языке за последние 3 года составляет:
2018-2019 учебный год- 34 детей;
2019-2020-32 детей;
2020-2021 учебный год-29 детей.
-Национальный состав воспитанников: все дети башкирской национальности ,что составляет 100%.
-Функционирует 2 разновозрастная группа.
-Обучение ведется на башкирском языке.
-Педагогический состав со знанием башкирского языка:
Осипова Люция Фазулловна, образование среднеспециальное, соответствует занимаемой должности;
Рахматуллина Разиля Юнусовна, образование высшее, без категории.

## Статистик мәғлүмәт:

Башкорт телен укытыуға йәлеп ителгән һуңғы өс укыу йылындағы балалар һаны :
2018-2019 укыу йылы -34 бала;
2019-2020 укыу йылы-32 бала;
2020-2021 укыу йылы-29 бала.
-Тәрбиәләнеүселәрҙең милли составы: барыһы ла башҡорт милләтенән,100% тәшкил итә.
-Балалар баҡсаһында төрлө йәштәге ике төркөм эшләй.
-Уҡытыу башҡорт телендә алып барыла.
-Башҡорт телен белгән педагогтар:
Осипова Люциә Фәзулла ҡыҙы,махсус урта белемле,билəгән вазифаһына ярашлы;
Рәхмәтуллина Рәзилә Юныс ҡыҙы,юғары белемле, категорияһыҙ.

**Приоритетные направления работы нашего детского сада:**

- Организация и внедрение методов сотрудничества по преемственности «семья –детский сад - школа»;
-Укрепление и сохранение здоровья детей и пропаганда ЗОЖ;
-Совершенствование работы по ознакомлению с родным краем, традициями и обычаями народов Башкортостана.
-Материально – технические условия обеспечивают достаточно высокий уровень охраны и укрепления здоровья детей.
-Из года в год ведется целенаправленная работа по укреплению и обогащению предметно - развивающей среды и материально - технической базы детского сада.

**Беҙҙең балалар баҡсаһының өҫтөнлөклө йүнәлештәре:**

-«Ғаилә - балалар баҡсаһы - мәктәп» араһындағы күсәгилешлелекте тәьмин итеү;
-Баланы физик яҡтан нығытыу, һаҡлау һәм сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау;
-Тыуған яҡ, башҡорт халҡының һәм Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың традициялары, йолалары менән таныштырыу эшен камиллаштырыу.
-Балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу һәм һаҡлауға матди техник шарттар тәьмин ителә.
-Йылдан – йыл балалар баҡсаһында матди техник һәм предметлы – үҫтереүсе мөхитте нығытыу һәм байытыу буйынса маҡсатлы эш алып барыла.

**Введение сайта ДОО на двух государственных языках РБ:**
Вся информация деятельности  детского сада открыта и доступна общественности. Сайт дошкольной группы ведется на двух языках, так как государственными языками Республики Башкортостан на всей ее территории являются башкирский и русский языки: башкирский язык как язык башкирской нации, реализовавшей свое право на самоопределение, русский язык как государственный язык Российской Федерации.

Балалар баҡсаһы эшмәкәрлеге тураһындағы мәғлүмәт бар йәмәғәтселек өсөн асыҡ  . Балалар баҡсаһы сайты ике телдә алып барыла, сөнки Башҡортостан Республикаһының бөтә территорияһында башҡорт һәм рус телдәре дәүләт теле булып тора: башҡорт телен башҡорт милләте теле булараҡ, үҙенең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын тормошҡа ашырыу, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле булараҡ.





**Реализация основной образовательной программы дошкольного образования**

Педагоги исходя из содержания ООП ДО формирует у детей нравственно-патриотические чувства и качества посредством этнокультурного развития.

Задача, которую мы ставим перед собой - научить детей любить землю, где родился и вырос, любить свой народ, его обычаи и традиции, уважать культуру других народов, знакомить детей с историей, бытом и фольклором народов, проживающих в нашей местности.

**В своей работе воспитатели используют следующие программы:** Примерная ООП ДО « От рождения до школы» под ред.Н.Е.Вераксы,Т.С.Комаровой,М.А.Васильевой.

« Башҡорт балалар баҡсалары өсөн комплекслы уҡытыу -тәрбиә программаһы» авт. Нафиҡова З.Ғ,Ғәлиева Ғ.Ғ.

« Башҡортостан-тыуған илем».Мәктәпкәсә йәштәге балаларға Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы Азнабаева Ф.Г.,Альбакова Г.Ш., Буранбаева А.Р.

Для реализации программы используем такие формы работы, как экскурсии, ООД, беседы, игры, развлечения, праздники, встречи с интересными людьми, фольклор.

В детском саду функционирует мини-музей. Здесь собраны предметы старинного народного быта с национальными элементами.

Мы знакомим детей с народными праздниками. Народные традиции, успешно способствуют решению разнообразных воспитательных задач своей красочностью, выразительностью, массовостью и наглядностью. В праздниках присутствуют тончайшие наблюдения людей за характерными особенностями времён года, погодными изменениями, поведением животных, птиц, насекомых, растений. Это народная мудрость, сохранённая в веках, и это мы стараемся передать детям. Проводятся такие праздники и развлечения, как « Башкортостан-тыуған ерем», «Бәпес туйы», «Шәжәрә байрамы», «Ҡар һыуына барыу йолаһы», «Ҡарға бутҡаһы», «Кейеҙ баҫыу», «Сөмбөлә байрамы», « Һабантуй».

**Приоритетные направления работы нашего детского сада:**

- Организация и внедрение методов сотрудничества по преемственности «семья –детский сад - школа»;
-Укрепление и сохранение здоровья детей и пропаганда ЗОЖ;
-Создание в детском саду атмосферы национального быта;
-Широкое использование фольклора (сказки, загадки, поговорки и т. д.);
-Знакомство с народными играми , с праздниками;
-Знакомство с народным искусством;
-Материально – технические условия обеспечивают достаточно высокий уровень охраны и укрепления здоровья детей.
-Из года в год ведется целенаправленная работа по укреплению и обогащению предметно - развивающей среды и материально - технической базы детского сада.

**Беҙҙең балалар баҡсаһының өҫтөнлөклө йүнәлештәре:**

-«Ғаилә - балалар баҡсаһы - мәктәп» араһындағы күсәгилешлелекте тәьмин итеү;
-Баланы физик яҡтан нығытыу, һаҡлау һәм сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау;
-Тыуған яҡ, башҡорт халҡының һәм Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың традициялары, йолалары менән таныштырыу эшен камиллаштырыу.
-Балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу һәм һаҡлауға матди техник шарттар тәьмин ителә.
-Йылдан – йыл балалар баҡсаһында матди техник һәм предметлы – үҫтереүсе мөхитте нығытыу һәм байытыу буйынса маҡсатлы эш алып барыла.

# Календарно-тематическое планирование содержания ООП ДО

## Календарь –тематик план

| Ай | Аҙна | Темалар | Йомғаҡлау сараһы |
|---|---|---|---|
| Сентябрь | 1-4-се аҙна | Көҙһылыу | Байрам: “Көҙһылыу беҙҙә ҡунаҡта” |
| Октябрь | 1-4-се аҙна | Башҡортостан-гөлбостан | Байрам: “Башҡортостан- тыуған ерем” |
| Ноябрь | 1-2-се аҙна | Дуҫлыҡ ептәре | Ижади күргәҙмә ”Дуҫлыҡ”(башҡорт халыҡ әкиәттәренән) |
| | 3-4-се аҙна | «Халҡым биҙәктәре» | Күргәҙмә : «Алтын ҡулдар»(ата-әсәләр менән ҡул эштәре) |
| Декабрь | 1-4-се аҙна | «Һаумы,ҡыш!» | «Яңы йыл байрамы» Балалар ижады күргәҙмәһе: «Беҙҙең яҡта ҡыш» |
| Ғинуар | 3-4-се аҙна | «Башҡортостандың хайуандар донъяһы» | Акция: «Ҡоштарға ярҙам итәйек»(тағараҡтар элеү) |
| Февраль | 1-2-се аҙна | «Йәшеллек донъяһы» | Тәжрибә: « Гөл үҫтерәм» (ботаҡтан,орлоҡтан,япраҡтан) |
| | 3-4-се аҙна | «Ил һаҡсылары» | Иртәлек «Ватанды һаҡлаусылар көнө».<br>Күргәҙмә: «Хәрби техника» |
| Март | 1-се аҙна | Әсәләр  нур сәсәләр | Иртәлек «Әсәйем –күҙ нурым». |
| | 2-4-се аҙна | Халкымдың көнкүреше | |
| Апрель | 1-4-се аҙна | Халҡым йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре | Йола байрамы: «Бәпес туйы» |
| Май | 1-2-се аҙна | «Еңеү көнө» | Күргәҙмә: «Олатайым фотоһы» |
| | 3-4-се аҙна | «Һаумы,ҡояшлы йәй!» | Балалар һабантуйы |

**Методические разработки,способствующие сохранению и развитию башкирского языка**












**Развивающая этнокультурная предметно-пространственная среда**
**Үҫтереүсе этномәҙәни предметлы мөхит**

В детском саду созданы условия для взаимодействия детей со сверстниками и взрослыми-предметно-пространственная среда,с учетом возрастных особенностей, интересов,потребностей и желаний детей.Предметно-развивающая среда раскрывает содержание регионального компонента в организации центров разных видов деятельности детей; это выставки книг башкирских писателей,поэтов,раскраски по мотивам башкирских народных сказок и литературных произведений современных авторов,образцы народных игрушек,одежды,народных промыслов,занятий народов.

Беҙҙең балалар баҡсаһында балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә,ҡыҙыҡһыныуына һәм теләктәренә таяныпп,төркөмдәрҙә белем биреү эшмәкәрлеген тәьмин итеү,балаларҙың тиҫерҙәре һәм өлкәндәр менән аралашыуын булдырыу өсөн үҫтереүсе предметлы мөхитойошторолған.Үҫтереүсе предметлы мөхит балаларҙың төрлө эшмәкәрлек үҙәктәрендәге төбәк үҙенсәлектәренең йөкмәткеһен асып бирә:Башҡортостан яҙыусыларының портреттары ҙәм китаптары күргәҙмәһе ,башҡорт халыҡ әкиәттәре һәм хәҙерге заман авторҙарының әҙәби әҫәрҙәре,улар буйынса һүрәт төшөрөү,ҡул эштәренә технологик карталар,схемалар,Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе халыҡ уйынсыҡтары өлгөләре,кейем-һалымдары,кәсептәре,шөғөлдәре үҫтереүсе предметлы мөхит ойоштороуҙа уның йөкмәткеһе баланың белем,рух,физик һәм уның дөйөм үҫешенә,теләктәрен ҡәнәғәтләндереү талаптарына тап килә.

## Театрлаштырыу эшмәкәрлеге







## Кейенеп-яһаныу мөйөшө



## Музыка мөйөшө



# Тыуған яҡты өйрәнеү үҙәге










## Телмәр үҙәге





## Уйын үҙәге








## Хәүефһеҙлек мөйөшө










## Спорт мөйөшө






## Тәбиғәт мөйөшө





## Һынлы сәнғәт үҙәге






**Оснащенность ДОО современными интерактивными средствами обучения**
**Заманса интерактив укыу саралары менән йыһазландырыу**

Детский сад оснащен современными интерактивными средствами обучения.
Компьютерно-техническое оснащение используется для различных целей:
-для демонстрации детям познавательных, художественных, мультипликационных фильмов, литературных и музыкальных произведений;
-для поиска материалов, обеспечивающих реализацию ООП;
-для предоставления информации родителям(законным представителям).

Балаларҙы белем алыу процессына ҡыҙыҡһындырыу өсөн,заманса интерактив уҡыу саралары әүҙем ҡулланыла һәм балалар менән даими эш алып барыла.
Компьютер-техник йыһазландырыу төрлө маҡсаттарға ҡулланыла:
-балаларға йәнһүрәттәр,нәфис фильмдар,музыкаль һәм әҙәби әҫәрҙәр күрһәтеүгә;
-төп белем биреү программаһын үтәүгә материалдар эҙләү;
-ата-әсәләргә мәғлүмәт биреү өсөн.





**Внедрение и использование инновационных технологий, методов и приемов в образовательный процесс, способствующих приобщению к истории, культуре, обычаям, традициям башкирского народа**

В нашем детском саду созданы благоприятные условия по обучению истории, культуре, обычаям, традициям башкирского народа . Оформлен уголок, имитирующий обстановку в юрте. Имеется палас, подушка, лоскутное одеяло, сундук, ковер, полонтенце, самовар, кумган, поднос, тустак, кашмау, хакал,тюбетейка,тирмень, куклы в башкирских костюмах, детские национальные костюмы.

Киләсәк быуынды тормошҡа әүҙем ҡараштa булған ,кешелек донъяһының мәҙәни һәм рухи ҡиммәттәрен ыңғай ҡабул иткән ирекле һәм милләтенә тоғро булған ,уны үҫтереүгә ынтылыусы шәхес итеп тәрбиәләү — беҙҙең мөһим бурысыбыҙ.
Был эште тормошҡа ашырыуҙа кескәйҙәрҙе башҡорт халҡының көнкүреше, үткән тарихы, ауыҙ-тел ижады, сәнғәте, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштырыу ҙур һөҙөмтә бирә.
Тәрбиәселәр заман үҙгәрештәре менән бәйле педагогик асыштар, технологик алымдар ҡулланып, халыҡ тәрбиәүи ҡанундарының, төпкөлөнә тәрәнерәк күҙ һалып, фольклор, әҙәбиәт, сәнғәт, ауыҙ-тел ижады аша был бурысты үтәйбеҙ. Әлбиттә, тыуған яҡты өйрәнеү халыҡтың, аш-һыуы, кәсеп-һөнәре, кейеме, йолаларына ғына ҡайтып ҡалмай. Был эш башҡорт теле, музыка, һынлы сәнғәт дәрестәрендә, уйын эшмәкәрлегендә, байрам иртәлектәрендә киң һәм тәрән алып барыла.
Беҙҙең балалар баҡсаһында башҡорт халҡының тарихын,мәҙәниәтен,ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәтеүгә уңайлы шарттар булдырылған. Тирмәгә окшаған мөйөш,бәләкәй музей , булдырылған.Унда урындыҡ,йөн иләү ҡоролмаһы,һандыҡ,һуғылған келәм, ҡорамышлы буй юрғандар,таҫтамал,самауыр, ҡымыҙ бешкес, милли кейемдәр бар.







**Взаимодействие с семьей и социальными институтами в части обучения и воспитания детей на башкирском языке**

Задачи во взаимодействии с семьей мы видим не столько в просветительской работе, сколько в организации совместной деятельности во вопросам обучения и воспитания детей на башкирском языке. Большое значение мы придаем активным формам взаимодействие с семьями воспитанников: выставкам совместного творчества, развлечением с участием родителей по региональным компонентам. Проводится консультация ,анкетирование родителей (законных представителей).

Беҙҙең балалар баҡсаһында ата-әсәләр менән эшмәкәрлек төрҙәре бик күп һәм улар менән берлектә үҙ милләтенең көнкүрешен,тарихын, әҙәбиәтен, сәнғәтен,мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәтен,йолаларын өйрәнәбеҙ.Халык ижадын киң ҡулланып,халыҡ педагогикаһына таяныр үҫеп килгән быуынды зиһенлерәк,аңлыраҡ һәм үҙ милләтенең ысын патриоты итеп тәрбиәләү,милли мәҙәнилеген үҫтереүҙә ғаилә менән берлектәге эш һөҙөмтәле була. Шулай ук «Ағинәйҙәр» клубы,ҡатын-кыҙҙар советы һәм ауыл китапханаһы менән берлектә төрлө саралар үткәреп торабыҙ.





# Өләсәйем һандығы







## Сөмбөлә байрамы







## Бәпес туйы






## Кейеҙ баҫыу





## Һабантуй







**Йомабикә Сәләхетдин ҡыҙы Ильясова менән осрашыу**






Вәлит ауылы ” Умырзая” балалар баҡсаһында райондың  мәктәпкәсә белем биреү учреждениялары мөдирҙәренең “Балалар баҡсаһының белем биреү эшмәкәрлегендә башҡорт телен уҡытыу ҙәм туған телде өйрәнеүҙә системалы ҡараш “темаһына арналған методик ултырыш



Результаты и достижения в образовательной деятельности ДОО и детей

| Год | Уровни | высокий | | средний | | низкий | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | начало учебного года | конец учебного года | начало учебного года | конец учебного года | начало учебного года | конец учебного года |
| 2017-2018 | показатели % | 25 | 36 | 43 | 57 | 20 | 17 |
| 2018-2019 | показатели % | 21 | 31 | 31 | 38 | 29 | 18 |
| 2019-2020 | показатели % | 23 | 30 | 35 | 47 | 28 | 21 |

Активные ссылки на публикации коллектива, в том числе в СМИ о достижениях ДОО, социальных сетях об эффективных практиках образовательной деятельности по обучению башкирскому языку и распространению педагогического опыта педагогов






➤Ултырыш

# Төп бурыс — туған телде өйрәнеү

**Вәлит ауылы «Умырзая» балалар баҡсаһында райондың мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары мөдирҙәренең «Балалар баҡсаһының белем биреү эшмәкәрлегендә башҡорт телен уҡытыу һәм туған телде өйрәнеүҙә системалы ҡараш» темаһына арналған методик ултырышы булып үтте.**

Ултырыш бөгөнгө көндөң мөһим мәсьәләһе буйынса дәрестәр күрһәтеү, фекер алышыу, түңәрәк өҫтәл формаһында ойошторолдо. Сарала 4 тема («Белем биреү процесында ҡатнашыусыларҙың туған телдә уҡыу һәм өйрәнеү буйынса хоҡуғын көйләүсе норматив-хоҡуҡи документтар», «Башҡорт телендә белем һәм тәрбиә биреү үҙенсәлектәре», «Ике телле лек шарттарында туған телгә һөйөү тәрбиәләү», «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың туған рус телендә телмәрен үҫтереү») буйынса сығыш яһанылар. Башҡорт телен уҡытыуҙа төп проблема итеп ғаиләлә бала менән туған телдә аралашыуҙың кәмеүе күрһәтелде. Беҙҙең төп башҡорт районы өсөн башҡорт телен уҡытыу артыҡ ҙур проблема булып тормауы ла һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Башҡорт телендәге методик ҡулланмалар, дәреслектәр етешмәүе генә бер аҙ борсолоу тыуҙыра. Ултырыш һуңында тәрбиәселәргә, ата-әсәләргә тәҡдимдәр индерелде. Башҡорт балалар баҡсаһы һәм төркөмдәрендә тик башҡортса һөйләшеү һәм аралашыуҙы талап итеү. Ата-әсәләрҙән балаларын тәрбиәләгәндә халыҡ ауыҙ-тел ижадын ҡулланыуҙарын тәҡдим итергә. Балалар баҡсаһында тәрбиәселәргә башҡорт телен өйрәнеү, телмәр үҫтереүҙе төп бурыс итеп ҡуйырға, даими эш алып барырға. Туған телде өйрәнгәндә дәрестәрҙә уйындарҙы күберәк ҡулланырға, сөнки уйын аша ул телде үҙләштерә. Ауыҙ-тел ижадын киң ҡулланыу, халыҡ педагогикаһына таянып эш итеү маҡсатҡа ярашлы булыуы билдәләнде. Шулай уҡ район методик берекмә етәксеһе Рәмилә Туҡбаева ултырыш барышында туған телдәрҙәге уҡытыу-методик ҡулланмалар һәм программаларға байҡау яһаны, уларҙың беҙҙең көнүҙәк проблемаға ярашлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. «Уны көндәлек эш барышында һәр ваҡыт ҡулланыу мотлаҡ», — тине ул.

**А.Вәлитова,**
«Умырзая» балалар баҡсаһы мөдире.



➤Фольклориада-2020

# Бәпес туйы

**Киләсәк быуындың милли үҙаңын үҫтереүҙә, туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыуҙа халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсеп килгән ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, ауыҙ-тел ижады өлгөләре ҙур роль уйнай.**

Быуындар күсәгилешлеген һаҡлап ҡалыу, башҡорт халҡының төплө аҡылын, фәһемле фекерҙәрен киләһе быуындарға аманат итеп тапшырыу маҡсатында Вәлит ауылы китапханаһы «Умырзая» балалар баҡсаһы, ауыл клубы менән берлектә төрлө саралар үткәрә. «Сөмбөлә», «Ҡарға
бутҡаһы» байрамдары, бөй-
ік әҙип Мостай Кәримдең
ыуыуына 100 йыл тулы-
ға – «Күкрәгемдән коштар
сорам» әҙәби-музыкаль
исәһе, Башҡорт теле көнөнә
налған «Һөйөклө башҡорт
е» шиғриәт кисәһе лә
ыл китапханаһы янында
ләп килеүсе «Ағинәйҙәр»
шмаһы ҡатнашлығын-
үткәрелде. Ошо уҡ маҡ-
а мәктәп балалары та-
ынан башҡорт халыҡ
әттәре сәхнәләштерелә.
лыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар
ә алдынан балалар баҡ-
ында тағы бер матур
а – «Бәпес туйы» күрһә-
де. Байрамда балалар
ксаһы хеҙмәткәрҙәре,
йҙәр, ауыл китапханаһы
«Ағинәйҙәр» клубы ағ-
ры ҡатнашты. Был йола
лларҙа, ата-әсәләрҙә туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, киләсәк быуынды милли рухта тәрбиәләү маҡсатында уҙғарылды.

Байрамды асып, баҡса хеҙмәткәрҙәре Г.Юнысованың «Бәпес ҡайтты» йырын башҡарҙы. Сараны алып барыусы Айгөл Вәлитова исемдәрҙең кеше яҙмышында мөһим роль уйнауы, балаға исем һайлағанда ҡолаҡҡа ятышлы, мәғәнәле исем һайлау кәрәклеген әйтеп үтте. Байрамға килеүсе әсәйҙәр һәм ағинәйҙәры, һикерткестәр һәм әүр
кестәр көйләп ишеттерҙе

Кескәй балалар
йыр-бейеүҙәре сараны т
ла йәнләндереп ебә
Уларға ҡарап һоҡлан
мөмкин түгел ине. Са
күстәнәстәрҙән һыйыл
торған сәй табыны артын
дауам итте. Баҡса мөди
Айгөл Тимерйән ҡыҙы б
рыһына ла рәхмәт һүҙҙәре
әйтеп, инде традицияға ә
ләнгән дөйөм сараларҙ
тағы ла үткәреү теләген е
керҙе.

Хәлидә Аср…

2019 йылда Вәлитова Айгөл Тимерйән ҡыҙы Өфө ҡалаһында үткәрелгән Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының IБөтә Рәсәй съезында ҡатнашты.




В 2020 году Рахматуллина Разиля Юнусовна приняла участие  в Конкурсе медиаконтента этнокультурного содержания дошкольного образования


МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
ИНСТИТУТ РАЗВИТИЯ ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

СЕРТИФИКАТ

Настоящим подтверждается, что

Рахматуллина Разиля Юнусовна

принял(а) участие в

Конкурсе медиаконтента этнокультурного содержания дошкольного образования

28 февраля 2020 года

Ректор А.В. Янгиров

С-1338